**Ниғмәтуллина Рәлиә**



Мин Ниғмәтуллина Рәлиә Наиль ҡыҙы, 9 класҡа тиклем Абдул урта мәктәбендә белем алдым, 10-11 класты Яҡшымбәт мәктәбендә дауам иттем. Әлеге ваҡытта М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында тәрбиәсе һөнәрен үҙләштерәм.
Балаларға тормошомдо бағышлауыма сикһеҙ шатмын мин! Бала саҡ ул кеше ғүмеренең иң бәхетле миҙгеле. Кешене бәләкәй саҡтан уҡ шәхес итеп тәрбиәләр өсөн тәрбиәсе профессионал булырға тейештер. Ул балаларҙың нескә генә күңелдәренә үҙгәрештәр индереп, уларға таныш булмаған ҡатмарлы әйберҙәрҙе ябай итеп күҙ алдына баҫтырып, киләсәк тормошҡа әҙерләй.

Оло рәхмәтемде һәр саҡ ярҙам ҡулы һуҙып торған атай-әсәйемә һәм уҡытыусыларыма еткергем килә. Нимә генә булмаһын, ҡайғыңды ла, шатлыҡ кисерештәреңде лә тик улар ғына аңлай ала. Барыһы өсөн дә рәхмәтлемен!